Башҡортостан Республикаһының мәғариф министрлығы Бөрйән муниципаль районы Иҫке Собханғол дөйөм белем биреү учреждениеһы урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Мастер-класс

« Балаларҙың телмәр хаталарын төҙәткәндә, компьютер технологияларын ҡулланып, Су – Джок терапияһын өйрәтеү »

Әҙерләне: уҡытыусы-логопед

Ишморатова Айгөл Ғәлимйән ҡыҙы

Иҫке Собханғол

2014-2015 уҡыу йылы

«Балаларҙың телмәр хаталарын төҙәткәндә, компьютер технологияларын ҡулланып, Су – Джок терапияһын өйрәтеү»

“Баланың аҡылы уның бармаҡтары осонда”.
В.А.Сухомлинский

Инеш һүҙ.

Мәғлүмәти-аралашыу технологияларын ҡулланыуымдың **маҡсаты**: телмәр етешһеҙлектәре һәм дисграфия өҫтөндә эшләгәндә, төрлө компьютер технологияларын ҡулланып, балаға мөмкин тиклем файҙалы, хәүефһеҙ һәм мауыҡтырғыс логопедик күнегеүҙәр өйрәтеү; уҡыуға ҡыҙыҡһыныу уятыу.

Ошо маҡсаттан сығып, мин үҙемдең алдыма шундай **бурыстар** ҡуйҙым:

-бала менән эшләү өсөн күнекмәләр әҙерләгәндә мәғлүмәти-аралашыу технологияларын ҡулланыуҙың төрлө сфераһын өйрәнеү;

-телмәр етешһеҙлектәре һәм дисграфия өҫтөндә эшләү өсөн презентациялар төҙөү;

-инновацион методтарҙы ҡулланыу;

-балалар менән логопедик интернет конкурстарҙа, олимпиадаларҙа ҡатнашыу.

Мәғлүмәти-аралашыу технологияларын ҡулланыу буйынса **эш системаһы**.

Алға ҡуйылған маҡсат һәм бурыстарҙы тормошҡа ашырыу өсөн мәғлүмәти-аралашыу технологияларын ҡулланыуҙың **төп йүнәлештәрен** билдәләп алдым:

- мәғлүмәти-аралашыу технологияларын ҡулланыу уҡытыусы-логопедтың фәнни-методик эшмәкәрлегендә;

- мәғлүмәти-аралашыу технологияларын ҡулланыу баланың телмәр етешһеҙлектәре өҫтөндә эшләгәндә;

- мәғлүмәти-аралашыу технологияларын ҡулланыу педагогтар менән тығыҙ бәйләнештә эшләгәндә;

- мәғлүмәти-аралашыу технологияларын ҡулланыу ата-әсәләр менән тығыҙ бәйләнештә эшләгәндә.

1-се слайд.

Тема: «Балаларҙың телмәр хаталарын төҙәткәндә, компьютер технологияларын ҡулланып, Су – Джок терапияһын өйрәтеү»

Теманы ҡыҫҡаса асып үтеү:

Ғалимдар иҫбатлауынса , баланың телмәр үҫеше ҡул суҡтарының һәм бармаҡтарҙың нескә хәрәкәттәр башҡара алыу кимәле менән тура бәйләнештә тора. Бармаҡ хәрәкәттәре үҫешкән булһа, баланың телмәре лә юғары кимәлдә була.Ул бер яҡтан ҡул суҡтарын яҙыуға әҙерләү булһа, икенсенән тирә-йүндәге предметтарҙы тотоп, һәрмәп, һыйпап өйрәтеү ҡоралы ла булып тора. Шуға ла ғалимдар ҡул суҡтарын «тыштағы мейе» тип тә атайҙар.

Бармаҡ хәрәкәттәрен үҫтереү өҫтөндә эште көн һайын 2-3 минут эсендә башҡарыу ҡарала. Тәүҙә өлкәндәр күрһәтеүе һәм улар менән бергә яйлап башҡарыу сифатында үткәрелһә, аҙаҡ үтәү темпы һәм һаны әкренләп арта бара.

Бармаҡ хәрәкәттәрен үҫтереүгә үҙ аллы массаж эшләү, рәсем, әүәләү, йәбештереү һәм ҡайсы менән эшләү ҙур булышлыҡ итә.

Бармаҡ хәрәкәттәрен үҫтереүгә массаж эшләүҙең традицион булмаған логопедик технологияларҙың береһе булып Су-Джок терапияһы тора. (“Су”- ҡул суғы, “Джок”-табан). Был терапияны көньяҡ-корея ғалимы, профессор Пак Чже Ву уйлап сығарған. Беҙ барыбыҙҙа беләбеҙ устарҙа һәм аяҡ табандарында кешенең эске органдарына тәьҫир итеүсе нөктәләр барлығын.Нөктәләрҙе стимуляциялау организм өсөн тик файҙалы ғына, зыяны юҡ. Беҙ уларға тәьҫир итеп, эске органдарҙың функцияларын көйләп торабыҙ. Мәҫәлән, сәтәкәй бармаҡ-йөрәк, сығанаҡ бармаҡ-бауыр, урта бармаҡ- эсәктәр, һуп бармаҡ- ашҡаҙан, баш бармаҡ-баш. Тимәк, билдәле бер нөктәгә тәьҫир итеп, шуға бәйле органға йоғонто яһайбыҙ. Ә был нөктәләргә йоғонто яһауҙың иң эффектив ысулы булып массаж шариктары тора.

Су-Джок терапияһы балаларҙың телмәр хаталарын төҙәтеүҙә, организмды нығытыуҙа, бармаҡ хәрәкәттәрен үҫтереүҙә ярҙам итә.

Баланың тәбиғи һөйләшеүе һәр ваҡытта ла тасуири була. Бала телмәре ошо сифаты менән һоҡланғыс һәм ҡабатланмаҫ. Беҙ ата-әсәләр менән берлектә бала телмәренең ошо гүзәл һыҙаттарын һаҡлап ҡалырға һәм һәр төрлө технологик ысулдар ярҙамында уны артабан үҫтереү өҫтөндә лә әүҙем эшләргә бурыслыбыҙ.

2-се слайд.

Маҡсат: Су – Джок терапияһы ярҙамында балаларҙың телмәр хаталарын төҙәтеү.

Бурыстар:

- Су-Джок системаһы буйынса биологик актив нөктәләргә тәьҫир итеү;
- Баш мейеһенең телмәр зоналарын стимуллаштырыу;
- Балаларҙың телмәр хаталарын төҙәтеү һорауҙары буйынса педагогтарҙың һәм ата-әсәләрҙең компетенция кимәлен үҫтереү.

Йыһазландырыу: мультимедия проекторы, һәр уҡыусыға һәм килгән ҡунаҡтарға таратып сығыу өсөн массаж шариктары, уҡытыусылар өсөн анкета һорауҙары.

Күргәҙмә материалдар: иҫкәрмә ҡағыҙҙары (памятка) « Өй шарттарында өндәрҙе дөрөҫ әйтеүҙе нығытыу» темаһына һәм буклет (аңлатмалар, логопедик күнегеүҙәр һ.б.), Су-Джок терапияһы тураһында мәғлүмәт йыйылған папка.

3-сө слайд.

Су-Джок терапияһы ысулдары:

- Махсус шарик менән массаж эшләү *(массаж шариктарын күрһәтеү);*

  Шарик менән массаж эшләү ысулдарын күрһәтеп 1-се бала шиғыр ятлап ишеттерә. Барыбыҙ ҙа бергәләп эшләп ултырабыҙ.

Тупты тәгәрләтәм түңәрәтеп,
Алға-артҡа йөрөтәм.
Усымды ла һыйпайым,
Бына нисек күрһәтәм.

Бесәй тәпәйен ҡыҫҡан кеүек,
Әҙерәк ҡыҫып алам усымда.
Һәр бер бармағым менән тотам,
Һәм башлайым икенсе ҡулымда.

4-се слайд.

- Эластик ҡулса менән массаж эшләү *(эластик ҡулсаларҙы күрһәтеп үтеү);*

Бармаҡтарға берәм-берәм ҡулсаны кейҙерә барырға,шиғыр юлдарын әйтә барырға:

Был бармаҡ-олатай,

Был бармаҡ-өләсәй,

Был бармаҡ-атайым,

Был бармаҡ-әсәйем

Был бармаҡ-мин үҙем,-

Бөтәһе-ғаиләм.

5-се слайд.

- Бармаҡтарға ябай массаж;

Шарик менән усына массаж эшләп 2-се бала шиғыр һөйләй. Барыбыҙ ҙа бергәләп эшләп ултырабыҙ.

Айыу килә алпан-толпан,
Артынан эйәргән балаһы.
Аҙаҡ килделәр балалар
Китаптарын асып һалалар

- Үксәләргә массаж *(массаж балаҫын күрһәтеп үтеү)*

6-сы слайд.

Балалар менән эшләү өсөн күнегеүҙәр:

- Бармаҡтарға гимнастика;

Шарик менән массаж эшләү ысулдарын күрһәтеп 3-сө бала шиғыр ятлап ишеттерә. Барыбыҙ ҙа бергәләп эшләп ултырабыҙ.

Ҡулымда минең терпекәй,
Тәгәрләп йөрөй энәкәй.
Терпекәй һыйпай усымды,
Яратам мин дуҫымды.

- Өндәрҙе автоматизациялау ;

4-се уҡыусы өндәрҙе автоматизациялау өсөн шиғыр һөйләп массаж эшләй:

“Б” өнөн автоматизациялау:

Баш бармаҡ бөрлөгән йыя.

“С” өнөн автоматизациялау:

Сығанаҡ бармаҡ салбар кейә.

7-се слайд.

- Лексик-грамматик категорияларҙы камиллаштырыу;

  *“Берәү-күп”*уйыны. Логопед предмет исемен берлектә әйтеп балаға тәгәрләтә. Бала шарикты тотоп, шул исемде күплектә әйтеп кире тәгәрләтә. *“Иркәләп әйт”, “Киреһенсә әйт”* уйындарын да шариктар ҡулланып уйнарға мөмкин.

- Хәтерҙе, иғтибарҙы үҫтереү; Балалар өсөн инструкция: ҡулсаны уң ҡулыңдың сәтәкәй бармағына кейҙер, шарикты уң ҡулыңа ал, ҡулдарыңды артҡа йәшер һ.б.; бала күҙен йома, логопед ҡулсаны уның икенсе бармағына кейҙерә, бала ҡулсаның ҡайһы бармаҡта икәнен әйтергә тейеш.

- Гимнастика эшләү;

  - Ә хәҙер ҡунаҡтар менән бергәләп гимнастика эшләп алайыҡ:

  Баҫтыҡ, ҡулдар кәүҙә буйлап аҫта, уң ҡулда шарик.

  1-ҡулдарҙы ике яҡҡа һондоҡ;

  2-ҡулдарҙы өҫкә күтәрҙек, шарикты икенсе ҡулға күсерҙек;

  3- ҡулдарҙы ике яҡҡа һондоҡ;

  4- ҡулдарҙы төшөрҙөк.

8-се слайд.

- Һүҙгә өн анализы;

  Өндәргә характеристика биреү өсөн ҡыҙыл, күк, йәшел шарҙарҙы ҡулланыу.

- Һүҙгә ижек анализы .

*“Һүҙҙәрҙе ижектәргә бүл”*күнегеүе.Бала ижекте әйтә бара, ҡумтанан шарикты ала бара, аҙаҡ шариктарын һанап сыға (һәр уҡыусы берәр һүҙгә анализ яһай: *бармаҡ, шар, терпе, сығанаҡ, массаж*)

9-сы слайд.

Махсус шариктар менән массаж эшләү өсөн күнегеү төрҙәре:



Һәр һүрәткә ярашлы күнегеү төрҙәрен бергәләп эшләйек.

1.Туп ике ус араһында, бармаҡтар бер-береһенә терәлгән. Тупты алға-артҡа йөрөтөп массаж эшләү.

2.Туп ике ус араһында, бармаҡтар бер-береһенә терәлгән. Тупты устар эсендә түңәрәтеп хәрәкәттәр яһау.

3.Тупты бармаҡ остары менән тотоп, алға әйләнеү хәрәкәте яһау (ҡапҡасты бороп япҡан кеүек).

4. Тупты бармаҡ остары менән генә ныҡ итеп ҡыҫып тоторға (4-6 тапҡыр).

5. Тупты бармаҡ остары менән тотоп, артҡа әйләнеү хәрәкәте яһау (ҡапҡасты бороп асҡан кеүек).

6.Тупты ике ҡул менән 20-30 см бейеклеккә ырғытып тотоу.

7.Тупты ҡул суҡтары менән ҡыҫып тотоу, бармаҡтар сатрашлап ҡыҫылған, терһәктәр ике яҡҡа йүнәлгән. Устар менән тупты ныҡ итеп ҡыҫып тоторға (4-6 тапҡыр).

8.Тупты бер устан икенсе усҡа һелтәп тоторға, яйлап темпты арттырырға.

10-сы слайд.

Телмәр хаталарын төҙәтеү, бармаҡтарҙың хәрәкәтсәнлеген үҫтереү,кәйефте күтәреү, сәләмәтлекте нығытыу өсөн балалар берәмләп алға сығып массаж шариктары менән күнегеүҙәр эшләтә.

Һүҙҙәр	**Хәрәкәттәр**
Был шарик түгел ябай, Ул энәле, бына ҡара.	*(Һул устағы шарикка ҡарайбыҙ, уң ҡулдың усы менән ҡаплайбыҙ)*
Бер тәгәрәтәм, ике тәгәрәтәм, Устарымды йылытып бөтәм.	*(Шарикты горизонталь тәгәрәтәбеҙ)*
Бер тәгәрәтәм, ике тәгәрәтәм, Устарымды йылытып бөтәм.	*(Шарикты вертикаль тәгәрәтәбеҙ)*
Тәгәрәтәм, тәгәрәтәм устарымда Нығ итеп баҫып тотам.	*(Устарҙа эҙе ҡалырлыҡ итеп ныҡлап баҫып, шарикты вертикаль тәгәрәтәбеҙ)*
Йоморо икмәк кеүек әйләндерәм, Көслөрәк баҫып шарикты.	*(Шарикты устың уртаһында түңәрәтеп тәгәрләтеү)*
Уң ҡулыма алам, Йоҙроҡҡа ҡыҫып тотам. Бер, ике, өс, арымайым, Шарикты мин ебәрмәйем.	*(Хәрәкәттәрҙе текстҡа ярашлы уң ҡул менән үтәйбеҙ)*
Һул ҡулыма алам, Йоҙроҡҡа ҡыҫып тотам. Бер, ике, өс, арымайым, Шарикты мин ебәрмәйем.	*(Хәрәкәттәрҙе текстҡа ярашлы һул ҡул менән үтәйбеҙ)*
Һалдым өҫтәлгә шарикты Ҡараным устарыма, Ҡалғанмы эҙе шариктың?	*(Шарикты өҫтәлгә һалабыҙ һәм ҡарайбыҙ, усыбыҙҙа бәләкәй генә соҡорҙар бармы?)*

11-се слайд

Һүрәттәрҙә нимәләрҙе күрәһең?



Ҡуян һүрәте ”һикерә” башлағас 5-се бала сығып шиғырын һөйләй. Шиғырҙың һәр юлына ярашлы массаж күнегеүҙәрен эшләйбеҙ.

Яланда, болонда
Ырғыйҙар ҡуяндар.
Үләндә лә тәгәрләнеләр,
Баш түбән әйләнделәр.

Бик оҙаҡ һикерҙеләр,
Арынылар, аяҡтары талды.
Ҡуян-әсәй һәр балаһын
Яратып һыйпап алды.

- Ә хәҙер, әйҙәгеҙ, ошо һүрәттәге терпе менән урман буйлап сәйәхәткә сығып әйләнәйек. Башҡа һүрәттәге ҡайһы бер предметтар ҙа беҙҙең әкиәтебеҙҙә осраясаҡ.

12-се слайд.

Терпе тураһында әкиәт.

13-сө слайд.

Йәшәгән, ти урманда, үҙенең өйөндә-өңөндә, бер терпе *(шарикты усҡа ҡыҫып йомоу).*
Ул өңөнән сыҡҡан *(устарҙы асыу һәм шарикты күрһәтеү)* һәм ҡояшты күргән.
Терпе ҡояшҡа ҡарап йылмайған *(йылмайыу, бер ҡулдың бармаҡтарын тырпайтыу)* һәм урман буйлап йөрөп килергә булған.

14-се слайд.

Туп-тура юл буйлап терпе тәгәрләп киткән *(тура хәрәкәт менән уста шарикты тәгәрләтеү).*

15-се слайд.

Тәгәрләгән-тәгәрләгән һәм шундай матур, йоморо аҡланға килеп сыҡҡан (*устарҙы түңәрәк формаһында тоташтырыу).*Эй ҡыуанған терпе һәм аҡлан буйлап йүгерергә, һикерергә тотонған *(шарикты усҡа ҡыҫып тотоу;күҙҙәргә гимнастика эшләү: терпенең хәрәкәтен күҙҙәр менән ҡабатлау).*Сәскәләрҙе еҫкәп ҡараған *(шариктың энәләренә бармаҡ остары менән тейеү һәм тәрән итеп тын алыу).*

16-сы слайд.

Ҡапыл ҡайҙандыр болоттар килеп сыҡҡан *(шарикты бер уста ҡыҫыу, икенсе уста ҡыҫыу, турһайып ҡарау),* һәм ямғыр тамсылай башлаған: тып-тып-тып *(бармаҡ остары менән шариктың энәләренә һуҡҡыларға).*

17-се слайд.

Терпе ямғырҙан ҙур бәшмәктең аҫтына йәшенгән *(һул ҡулдың усы менән эшләпә эшләү һәм шарикты уның аҫтына йәшереү).*

18-се слайд.

Ямғыр яуып үткәндән һуң аҡланда төрлө бәшмәктәр үҫеп сыҡҡан: уҫаҡ бәшмәге, ҡайын бәшмәге, баллы бәшмәк, гөрөздә һәм хатта аҡ бәшмәк *(бармаҡтарҙы күрһәтергә).*Терпенең бәшмәктәрҙе йыйып, өйөнә алып ҡайтып, әсәһен ҡыуандырғыһы килгән. Ә улар шундай күп... терпе уларҙы нисек алып ҡайтыр һуң? Эйе, үҙенең арҡаһында әлбиттә! Терпе бәшмәктәрҙе йыйнаҡ ҡына итеп энәләренә ҡаҙап алған *(һәр бер бармаҡтың осон шариктың энәһе менән сәнсеп сығыу).*

19-сы слайд.

Терпе бик ҡәнәғәт булып өйөнә йүгергән (*йылмайыу, бер ҡулдың бармаҡтарын тырпайтыу).*

20-се слайд.

Су – Джок терапияһынын өҫтөнлөктәрен һанап үтәйек инде:

- *Юғары нәтижәлелек (эффективлыҡ)*
- *Күп яҡлылыҡ (универсаллек)*
- *Ҡулланыу ябайлығы*
- *Хәүефһеҙлек*

21-се слайд.

Су-Джок терапияһы беҙгә ниндәй осраҡтарҙа ярҙам итә?
Һығымта яһап үтәйек:

- *Су – Джок терапияһын телмәр етешһеҙлектәре коррекцияһында ҡулланғанда ярҙам итә .*

Дәрес һеҙгә оҡшаһа һүрәттәге малай менән бергәләп ҡул сабабыҙ.

22-се слайд.

Иғтибар менән тыңлап, беҙҙең менән бергәләп ҡатнашып ултырғанығыҙ өсөн ҙур рәхмәт!

Килгән ҡунаҡтарҙан анкета тултыртып йыйып алыу. Иҫкәрмә ҡағыҙҙары (памяткалар) һәм буклеттар таратып биреү.